## Донъяла



**ПАЛЕСТИНА.** Газ секторында йәшәүселәрҙең балалары ауырлыҡтарға ҡарамаҫтан ғилемгә ныҡ ынтыла, улар ижад һәм инновация өлкәһендә алдынғы булыуҙарын тағы ла раҫланылар. Жәбәлиә ҡасҡындары лагерынан 14 йәшлек ҡыҙ математика буйынса халыҡ-ара бәйгелә еңеү яуланы, ә унда бөтөн донъянан иң көслө йәш математиктар ҡатнашты. Ошо аҙаҡҡы йылдары Газ секторында блокадаларға, төрлө ҡанлы бәрелештәргә ҡарамаҫтан, ижади һәм аҡыл ҡаҙаныштары арта ғына бара. 9-сы синыф уҡыусыһы Ариж ун илдән килгән 2500 дәғүәсене үтеп, һигеҙ минут эсендә 182 ҡатмарлы мәсьәләне сисеп, еңеүсе булды.

* * *

Мөхәммәд (с.ғ.с.) пәйғәмбәр тураһындағы китап Гиннес рекордтар китабына инәсәк. "Был Мөхәммәд" тип аталған донъялағы иң ҙур китап 1500 кг тарта, ул Гиннес рекордтар китабына ингән тәүге ғәрәп китабы буласаҡ. Оҙонлоғо биш, ә киңлеге дүрт метр булған был китап әлеге көндә Әл-Хамра Молда күргәҙмәгә ҡуйылған. Ул 429 биттән тора. Китапта Мөхәммәд (с.ғ.с.) пәйғәмбәрҙең тормошо, эшмәкәрлеге, кешеләргә һәм йәмғиәткә яһаған файҙалы йоғонтоһо тураһында бәйән ителә. Китаптың авторы - Абдулла Абдуләзиз Әл-Муслих, мөхәррире - Мөхәммәд Сәид Әләүләки. Китапты төҙөүҙә иллегә яҡын кеше ҡатнашҡан.

* * *



**АВСТРИЯ.** Австрия әрмеһе үҙ сафына мосолмандарҙы саҡырҙы. Хөкүмәт был аҙым мигранттарҙың әүстриә йәмғиәте эсенә инеп китеүенә, уға нығыныуында ярҙам итәсәк, тип иҫәпләй. Оборона министры вәкиле Петер Барту әрмелә хеҙмәттә һалдаттың ниндәй дин тотоуы мөһим түгел, тип белдерҙе. "Ниндәй дингә ҡараһа ла, ир-егет әрмелә ярты йыл хеҙмәт итеүҙеме йәки альтернатив хеҙмәтте һайлап, оҙағыраҡ хеҙмәт итеүҙеме (һоспиталь, социаль учреждение) үҙе хәл итәсәк". Мосолманды әрмегә саҡырыуҙың үҙ үҙенсәлеге лә бар, ти Петер Барту. "Был талапсан динде тотоусы егеттәр урындағы ислам йәмғиәте шураһынан уға ышаныс белдергән ҡағыҙ килтерергә тейеш". Мосолмандар Вена районындағы Мария-Тереза ҡаҙармаһында хеҙмәт итәсәк, сөнки унда мәсет бар.

# КИТӘБҮТ-ТӘРБИӘ

## (Тәрбиә китабы)

**Ҡәйүм НАСЫРИ**



### Һикһән дүртенсе тәрбиә

Эй уғыл, урланған нәмәне алмаҡтан бик һаҡлана күр. Кәрәк үҙең урла, кәрәк белә тороп урланған нәмәне ал, икеһе лә барыбер. Аңһыҙҙан урланған нәмә ҡулына керһә, үҙендә ҡалдырма, эйәһенә тапшыра күр.

### Һикһән бишенсе тәрбиә

Әммә, эй уғыл, тыштан дуҫлыҡ күрһәтеп, эсендә дошманлыҡ үә хөсөд йәшереп йөрөгән кешенән бик һаҡлан. Был замандың дуҫтарына ла ышанма. Берәү һине алдында маҡтаһа, әлбиттә, бел, һис шикһеҙ, һине артында яманлай торғандыр. Тәжрибә ҡылмай тороп алданма.

### Һикһән алтынсы тәрбиә

Эй уғыл, яҡшы һүҙ менән уҫалды юлға һалырмын тимә. Ахмаҡ үҙ-үҙенә ҡылған ҡәҙәр зарарҙы аҡылды әҙәм дошманына ла ҡылмаҫ. Әгәр, эй уғыл, һине алдында маҡтаһалар үә яҡшылығың өсөн һиңә рәхмәт ҡылһалар: "Һай рәхмәт, мине маҡтайһығыҙ икән", - тимә, эсендән тын (шым тор). Әгәр дуҫтарым күп булһын тиһәң, кеше эшенә ҡатнашма үә һис кемгә бәйләнмә - һәммә халыҡ һиңә дуҫ булыр.

### Һикһән етенсе тәрбиә

Эй уғыл, ҡулға кереүе мөмкин булмаған нәмәне өмөт итмә. Ғәмәлең миҡдарынса ғына өмөт ит. Мәҫәлән, ун тинлек ғәмәл ҡылып, ун һум өмөт итергә урын юҡ. Һынамаған үә тәжрибә ҡылмаған эшкә тотонма. Һаман үҙендең белгән эшенде эшлә.

### Һикһән һигеҙенсе тәрбиә

Эй уғыл, кешенең күңеленә хилаф килә торған һүҙҙе телеңә килтермә. Бер һүҙҙе һин файҙаһыҙ әйтеп ебәрерһең, ишеткән кешенең күңеле йәрәхәтләнә торған һүҙ булыр, күңеле рәнйер. Кеше күңелен рәнйетеүҙән бик һаҡлан.

### Һикһән туғыҙынсы тәрбиә

Эй уғыл, кешенең пәрҙәһен йыртма, йәғни халыҡ алдында уның ғәйебен йөҙөнә әйтмә, халыҡ алдында уны оялтма, бик яман холоҡтыр. Кешенең ғәйебен үә килешмәгән эшен халыҡ алдында әйтеү - башына туҡмаҡ менән һуҡҡандан да яманыраҡтыр. Үҙендең ғәйебенде халыҡ алында үҙеңә һөйләһәләр, яҡшы булырмы?

### Туҡһанынсы тәрбиә

Үҙендең ҡул аҫтындағыларҙы һәр ҡайсан риза ҡыл: йәғни йәмәғәтеңде үә хеҙмәтселәреңде рәнйетмә. Хеҙмәт хаҡтары булһа, ҡулыңда аҫрама (тотма) хеҙмәт иткән өсөн шунда уҡ аҡсаһын бир, риза ҡыл. Һәр бер күңеленә килгән эште эшләргә ашыҡма, һуңынан үкенерлек булмаһын, уйлап эш ҡыл.

### Туҡһан беренсе тәрбиә

Эй уғыл, халыҡ ҡаршыһында ғиззәтем үә хөрмәтем артыҡ булһын тиһәң, асыҡ ҡуллы үә икмәкле-тоҙло, йомарт бул. Йомартлыҡ менән дәүләт кәмемәҫ, бәлки, дәүләттең артыуына сәбәптер. Саҙаҡа, хәйер һис ҡайсан кешене бөлдөрмәҫ. Кешенең ярҙамына мохтаж булыуҙан һаҡлан. Эй уғыл, кешенең миннәтен (яҡшылыҡҡа ҡаршы яуап) муйыныңа йөкләмә, үҙендең хазинаңда барына ҡәнәғәт ҡыл.

### Туҡһан икенсе тәрбиә

Кешенән көтөргә нәмә алып, бурыслы булма. Кешегә бурыслы булдың иһә уның ҡоло булдың. Ахмаҡ үә наҙандар эшенә ҡатнашма, тағы үҙенде кәмһетә үә хурлай күрмәһендәр. Үә улар менән бәхәс ҡылышма, һүҙ көрәштермә, Лоҡман хаким яуабын хәтерендә тот.

### Туҡһан өсөнсө тәрбиә

Эй уғыл, ашағанда үә даһи күп әҙәптәр барҙыр. Инсан булған әҙәмгә ул әҙәптәрҙе үтәмәк шарттыр. Ашың хәләлдән булһын. Тағам ашарға ултырғанда ҡулынды йыуыу, үә даһи тағамдан бушағас, ҡулынды йыуыу, ашың бәрәкәтле итер. Әммә ашты бик ҡайнар ашама, ҡайнар ашта бәрәкәт кәмдер. Хайуан шикелле, ашағанда тағамды еҫкәп ҡарама. Ҡайнар булһа, өрөп ашама, өрөп эсмә - былар әҙәпһеҙлектән һаналыр.

### Туҡһан дүртенсе тәрбиә

Эй уғыл, аш алдынан "бисмилләһир-рахмәнир-рахим", тип әйт, ашаған ниғмәтең хәләл булыр. Әммә харам ниғмәткә "бисмилләһ" әйтеү тыйыла. Ә хәләл ниғмәткә "бисмилләһ" әйтмәһәң, ашаған аҙығың шайтан менән уртаҡ булыр. Бисмилләне ауыҙ менән әйтеү тейешлелер, табын артындағы башҡа кешеләрҙең дә иҫтәренә төшөрөү булараҡ. Ашап туйғас, "әлхәмдү лилләһ" тип, шөкөр итергә кәрәк. Әммә "әлхәмдү лилләһ" тип эстән генә әйтеү тейешле, башҡаларҙы әле туймаған кешеләрҙе туҡталырға мәжбүр итмәһен.

### Туҡһан бишенсе тәрбиә

Даһи тағамды, эй уғыл, уң ҡулың менән аша. Ләкин ауыҙынды тултырып ҡапма. Ваҡваҡ сәйнәп аша, ашың һеңерлек булһын. Табынға ашты килтергәс, дәррәү ашарға ултыр, ашты көттөрмә. Даһи ашап туйғас, өҫтәлдән ашты алмаҫ борон тороп китмә. Йәнә, күберәк кеше килгән булып, бер генә кеше килмәгән булһа, бер кеше өсөн күп кешене көттөрмә.

### Туҡһан алтынсы тәрбиә

Ашаған ваҡытта уңға-һулға ҡарама, алдыңа ғына ҡарап ултыр. Кешенең өлөшөнә үә кешенең ҡашығына күҙ һалма. Тағамдың уртаһынан алма, бәлки табаҡтың үҙеңә таба яғынан үә ситенән алып аша. Үә алдыңа түкмәйенсә үә тамыҙмайынса аша. Хосустан, мәжлестә олуғ әҙәмдәр булһа, оят булыр. Эт ялаған шикелле, шапылдатып ашама. Тәрилкәнең өҫтөнә ятып ашама, мәжлестә был ғәйеп эштер.

### Туҡһан етенсе тәрбиә

Эй уғыл, мәжлестә ололар булһа, уларҙан элгәре ашҡа ҡул һуҙма, был әҙәпһеҙлек булыр. Даһи ғәйреләр ашап туйғас, кешенән ҡалып ашап ултырма. Күп ашамаҡ зарарлылыр, хайуан фиғелелер, күп ашауҙан төрлө ауырыуҙар пәйҙә булалыр. Аҙ ашамаҡта файҙа барҙыр, есемең сәләмәт булыр, зиһенең саф булыр, хәтерең ҡеүәтле булыр.

### Туҡһан һигеҙенсе тәрбиә

Эй уғыл, әгәр ҡунаҡ саҡырып һыйлаһаң, ҡунағың аҙ булһа, бергә ултырып аша, әгәр ҡунаҡтарың күп булһа, үҙең хеҙмәт ит. Әммә ҡунаҡтарҙы ташлап китеп йөрөмә. Даһи ғәжиз итерлек ҡәҙәр ҡунаҡтарынды ҡыҫтама. Ни бар ниғмәтенде ҡунаҡтарың алдына асыҡ йөҙөң менән ҡуй. Ҡунаҡтарың барында йәмәғәтең үә хеҙмәтселәреңә асыуланма, талашма. Даһи ҡунаҡтар менән әңгәмә ҡыл, ят кеше кеүек булып йөрөмә.

### Туҡһан туғыҙынсы тәрбиә

Эй уғыл, уйламағанда ҡунаҡтар саҡырып ҡунаҡ ҡылһаң, бер-береһенә дошман кешеләрҙе бер мәжлескә йыйма, бер табынға ултыртма. Ҡунаҡтарҙы танып, тейешле урындарына ултырт. Ғилем әһелен бер ергәрәк, вә ғәүәм халҡын йәнә үҙалдына, үә байҙарҙы шулай уҡ һәр ҡайһыһын тейешле урындарына ултырт.

### Йөҙөнсө тәрбиә

Эй уғыл, белмәгән һәм тәжрибә ҡылмаған таныштарындан һаҡлан. Кеше менән кеше араһында әхләҡ яғынан айырма бик күп була. Игелектең ҡәҙерен белмәгәндәргә иткән изгелегең әрәмгә китәсәк. Күркәм холоҡ эйәләренә хөрмәт үә изгелек күрһәтһәң, улар һиңә ҡол булырҙар. Әгәр изгелек ҡәҙерен белмәгәндәргә хөрмәт үә изгелек күрһәтһәң, шөкөр итмәҫтәр һәм кирелектәрен арттырырҙар. Ундай әҙәмгә изгелек итһәң: "Ҡара әле, мин бындай изгелектәргә хаҡлы икәнмен. Миңә әле тағы фәлән нәмә, фәлән нәмә кәрәк ине", - тип, талап итеп, дәғүәләрен (талаптарын) арттыра барып, һине үҙҙәренең ҡолона әйләндерерҙәр.

### Йөҙ ҙә беренсе тәрбиә

Имде, эй уғыл, кешеһенә ҡарап дуҫлыҡ үә мөғәмәлә ҡылмаҡ кәрәкле эштер. Һәр кем янында асыҡ йөҙ менән йомшаҡ һөйләшеп, яҡшы кешеме, яманмы, мосолманмы, йә ғәйре дин тотоусымы - һис айырма. Ни тиклем, Аллаһ Тәғәлә Муса ғәләйһис-сәләмгә әмер ҡылды: "Фирғәүен менән йомшаҡ һөйләш", - тине. Ҡарттарҙы хөрмәтлә үә олола үә үҙендән кес кенәләргә мәрхәмәт үә шәфҡәт ҡыл, ҡартты хөрмәтләмәһәң, йәшкә шәфҡәт ҡылмаһаң, һин өммәт түгел. Ғәрәпсә, уҡый башлағас, был һүҙҙәрҙе хәҙис китаптырында күрерһең, эй уғыл.

### *Йөз ҙә икенсе тәрбиә*

Ҡарындаштарың менән, дуҫтарың менән йөрөш, әммә ташлашып ебәрмә. Йәғни бик һирәк тә барма, тағы һине онотмаһындар, көн һайын да барма, тағы һинән туймаһындар... Эй уғыл, йөрөшһәң, яҡшы кешеләр менән йөрөш, ҡатышһаң, яҡшы кешеләргә ҡатыш.

**(Дауамы бар).**

**"Дәғүәт" нәшриәте.**